23. Юлмухаметов Әхмәтвәле

атаһы - Әхмәтгәрәй
инәһе - Хәтернисә

1911 йылда тыуған.



Әхмәтвәле ағай балалыҡ һәм үсмер йылдарын бик ауыр үткәрә. Туғыҙ йәшен тулыуға атаһы вафат була. 12 йәшендә инәһе иргә сыға һәм улын ташлап китә. Өйҙә берҙән-бер бала Әхмәтвәле тороп ҡала. Үҙ үҙ-аллы тормош көтә башлай. Шунлыҡтан яҡын туғандарының кәңәше буйынса бик иртә өйләнергә мәжбүр була. Һуғыш башланғанда „Үҙәк" колхозының 1-нсе бригадаһында бригадир ине. 1941 йылдың июлендә һуғышҡа алына.
Шул ваҡытта һуғыш хәтирәләрен иҫкә төшөрөп, үҙе түбәндәгеләрҙе һөйләне:
„Мин тәүҙә Алкино лагерендә әҙерлек үттем. Лагерҙән август аҙаҡтарында киттек. Китеп барғанда Киров өлкәһендә

туктаттылар. Унан беззе Пермь калаһына завод эшенә килтерзеләр. Фронт өсөн корал етештерзек. 1942 йылдың апрелендә фронтка алып килделәр. Түге һуғышта Торжокты азат иттек. Унан Ржев калаһын алыу өсөн һөжүм башланык. Волга йылғаһының яр башында бер нисә танкыу наступать итеп карапык, Ржевты алып булманы. Ошо һөжүм вакытында ике яктан да күп кыйралыш булды. Бында мин ранен булдым. Кул яраланды. Госпиталдә дауаландым, тағы ла һуғышка индем. Айрым команда ийирзылар. Был командала пулеметтарзан тыш Катюшалар за бар ине. Ржевты алыу өсөн тағы ла һөжүм башланык. Өс көн тигәндә генә бик күп юғалтыузар менән без Ржев калаһын азат иттек. Был алышта без Катюшалар һәм самолеттар ярҙамында ына еңә алдык. Ошонан һуң без бер вакытта ла сигенмәнек, һәр вакытта ла алға барзык. Смоленский калаһы өсөн бик каты һуғыштар булды. Кала кулдан кулға күсте. Өсөнсөһөндә без еңеп немецтарзы был каланан куып сығарзык. Артабан һөжүм итеп, бер кала артынан икенсе калаһы һәм ауылдарзы азат иттек.

Калинин өлкәһендә каты яраландым. 32 көн буйына кайза

һарайҙа, йә һыуык өйҙә булдым. Шунан
сак Калинин калаһындағы госпиталь-
гә килеп эләктем. Һуңынан 1944 йыл-
да кайттым".

Һуғыштың һуңғы йылдары.

Колхозда эшселәр: катындар, карттар, йәш үҫ-
мерҙәр. Кешеләр аслы-туклы эшләп бик йонсо-
ғандар. Бер аҙна үтеүгә колхоз правлениеһе
уны полевод итеп куя. Йәрәхәттәре бер
ни тиклем төҙәлгәс, бригадир вазифаһын
башкара. Әлбиттә, был вакытта бри-
гадир булып эшләүе бик ауыр була.
Һуңынан йәшерәк кешеләр кайта башлағас,
ул бригадирлек эшен ташланы. Аҙактан
һуғыштың II группа инвалиды булһа ла
оҫталык эше менән шөғөлләнде.
Йәй көнө арбалар, машиналарға ағас зап-
частәр (мәҫәлән шатун), ә кыш көнө сана-
лар эшләне.
Һуғышта һәм тыныс тормошта күрһәт-
кән батырлыктарын һәм хеҙмәттәрен
баһалап хөкүмәт миҙалдар, колхоз почет
грамоталары менән бүләкләне.
Уның балалары: Рәшит, Рәшиҙә, Рәүил,
Мөрәт, Рәйсә, Ришат, Рәйес, Миң-
зилә, Мәнүрә хәҙергә көндә бөтә-
һелә үҙ-аллы тормош юлына баҫып,
үҙҙәре балалар үҫтерәләр
1975 йылдан башлап һуғышта алған
яралары уны аяктан йыкты һәм түшәк-

нә ятырға мәжбүр итте. Тормош иптәше Миннегөл Әхмәтовле авыҙы якшы тәрбиәләне. Шуғалырҙа инде-Әхмәтовле аһай катынына һәр вакыт рәхмәттәр әйтеп ятты. Оҙак һәм каты ауырығандан һуң 1983 йылда вафат булды.